Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ

# Башҡорт туйы һәм туй-йола поэзияһы

Башҡорт халҡының туй йолалары, уларға бәйле тыуған поэтик мираҫ — ғәжәп бай һәм фәһемле. Башҡорт туй-йолалары ҡайһы бер аңлатмалар менән С.Руденко, М.Буранғолов, Ғ.Ҡорбанғәли, Х.Ғәбитов, Ғ.Вилданов тарафынан яҙып ҡалдырылған. Ғаилә-көнкүреш йолаларын хәҙерге заман талаптарынан сығып өйрәнеүҙә был ғалимдарҙың, халыҡ ижадын йыйыусыларҙың хеҙмәттәре ныҡлы нигеҙ.

Туй йолалары һәм уға бәйле халыҡ ижады К.Мәргән, М.Сәғитов, С.Галин, Р.Солтангәрәева тарафынан да өйрәнелә һәм тикшерелә. Туй йолаларын тарихи-этнографик планда ҡараған хеҙмәттәр ҙә юҡ түгел. С.Руденко, П.Назаров, Б.Юлыев, Р.Кузеев, Н.Бикбулатов хеҙмәттәре быға асыҡ дәлил.

Башҡорттарҙың туй-йола поэзияһын комплекслы тикшереү менән бергә, уны башҡа төрки халыҡтарының туй-йола мираҫы менән сағыштырма планда өйрәнеү ҙә мөһим. Туйға бәйле фольклорҙы ошо аспектта өйрәнеү кәрәклеген А.В.Торонова, Н.П.Лобачева һәм башҡа ғалимдар ҙа билдәләп үтте.

Туй-йола поэзияһына ингән сеңләүҙәр тураһында Ә.Харисовтың "Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы", Ж.Кейекбаевтың "Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы" тигән китаптарында бер ни тиклем мәғлүмәт бар. Уларҙа сеңләүҙәргә аңлатма, дөйөм характеристика бирелә, башҡарылыу тәртибе аңлатыла, әммә үҙенсәлектәре тулыһынса һәм туй-йола поэзияһына бәйләп тикшерелмәй. Туй-йола поэзияһына бәйле тыуған йырҙар, һамаҡтар, арбауҙар, әйтемдәр, таҡмаҡтар, шул уҡ сеңләүҙәр хәҙерге үҫешкән поэзиябыҙҙың инештәре булып тора. Халыҡ поэзияһының художество үҙенсәлектәренә иғтибар итеү әле башҡорт шиғырҙарында юҡ тип иҫәпләнгән строфа үрнәктәрен табырға, поэтик фонетиканы, экспрессив сараларҙы өйрәнергә ярҙам итә.

Фольклор материалының әҙәбиәтте үҫтереүҙә, әҙәби оҫталыҡты күтәреүҙә йоғонтоһо ҙур. Эпик әҫәрҙәрҙә Ж.Кейекбаев, Һ.Дәүләтшина, К.Мәргән, поэзияла М.Кәрим инде юғалып ҡалған сеңләүҙәрҙе генә лә ҡулланып, драматизм элементтарын көсәйтте. Ҡайһы бер сеңләү өлгөләре йырға күсеп, әле лә йәшәп килә. Ҡыҫҡаһы, башҡорт фольклористикаһында әлегә үҙенең тейешле сағылышын тапмаған һәм халыҡ ижадының башҡа жанрҙары араһында юғалып ҡалған сеңләүҙәр үҙенсәлекле поэтик жанр булыуы менән үҙенә иғтибарҙы йәлеп итә.

Йола поэзияһы йәмғиәт үҫешенең төрлө осоронда халыҡтың матди, рухи донъяһының, аңының, ҡарашының, быуындан-быуынға тупланған ифрат бай тормош тәжрибәһенең поэтик кәүҙәләнеше һәм образлы сағылышы булып йәшәй. Боронғо традицион туй-йола тамашаһы — ҡатмарлы күренеш. Кирәй Мәргән яҙғанса: "Туй йолалары, асылда, күп баҫҡыслы тамаша (халыҡ драмаһы, халыҡ театры) төҫөн алып киткән. Ғәжәп үҙенсәлекле был тамашала (драма) халыҡтарҙың донъяға ҡарашы, поэтик һәм музыкаль культураһы, социаль-көнкүреш һәм ижтимағи үҫеш үҙенсәлектәре сағыла. Туй йолалары — халыҡтың меңәр йылға һуҙылған үҙенсәлекле поэтик мираҫы булып торалар. (К.Мәргән. Ғаилә һәм тормош-көнкүреш йолалары. "Әҙәбиәт. Фольклор. Әҙәби мираҫ". Өфө, 1976, 55-се бит.)

Кәләште яусылап алғанда, ҡыҙ бирелгән еренә риза булғанда, туй халыҡ өсөн үҙенә күрә ҙур байрам төҫөн алған. Әкиәттәрҙә туйҙың ете көн, ете төн барыуы, һыйҙың мул булыуы, туйҙа бөтә ил ҡатнашыуы әйтелә. "Ялыҡ бей, Ҡармасан менән Сәрмәсән" дастанында туй шулай тасуирлана:

Ҡара абыз риза булды
Ҡыҙ бирергә,
Халҡы шунан, эй, тотондо
Мыж килергә.
Әкиәт тиһәң, әкиәт түгел,
Туй башланды,
Ете көн һәм ете төн ул
Тоташ барҙы.
Түрҙә булды был абызың,
Абыз ҡоҙа,
Йырсылары йыр башланы
Һуҙа-һуҙа.
Көрәгәләр килә торҙо
Буҙа менән,
Туҫтаҡтарҙы уртаҡ эстек
Ҡоҙа менән.
Буҙалары бөтөүенә,
Ҡоҙаларым,
Тәпән-тәпән бал эсереп
Ыҙаланы.
Унан килде һаба-һаба
Ҡымыҙҙары,
Уңған икән ҡымыҙ бешкән,
Һай, ҡыҙҙары!
Йырлап биргәс, эсмәйенсә,
Сараң юҡтыр,
Бөтәһе лә хәләл ризыҡ,
Харам юҡтыр.
Буҙаһы ла, бал, ҡымыҙы
Бер ҡорһаҡта
Урын тапты, көнө-төнө
Ултырһаҡ та,

Уйын-көлкө, бейеү, көрәш,
Бәйге, уҙыш
Барған өсөн һый һәм хөрмәт
Менән ярыш...

Ысынлап та, туй үҙе бер теүәлләнгән тамаша, халыҡ пьесаһы, драмаһы булып күҙ алдына баҫа. Ҡыҙ яусылауҙан алып, килендең ҡәйнә йортона төшөүенә тиклем эҙмә-эҙлекле ваҡиғалар үҫешен күреп була был тамашала, хатта уның кульминацион нөктәһе лә бар. Туй-йола поэзияһы өлгөләре — йыр, сеңләү, һамаҡ, әйтеш, әйтем, таҡмаҡ, ырым-юрауҙар — ошо ҡатмарлы тамашаның айырылмаҫ өлөштәрен тәшкил итә. Ғаилә ҡороуға бәйле поэтик материал, үҙенсәлекле ижад төрөнә әйләнеп, башҡорт халҡының рухи байлығын, ниһайәт, мәҙәниәтен тыуҙырыуҙа ла мөһим роль уйнаған.

Хәҙер фольклорсыларҙың күп өлөшө йола күренештәренең матди сағылышын ер эшкәртеү, йәки малсылыҡҡа нигеҙләнгән традицияларға бәйләй. Ғәмәлдә, башҡорттарҙың байтаҡ туй-йолалары малсылыҡҡа нигеҙләнгән тормош ерлегендә барлыҡҡа килгән. Сөнки, башҡа туғандаш халыҡтар кеүек үк, башҡорттар ҙа бик боронғо замандарҙан бирле мал аҫраған, бигерәк тә йылҡысылыҡҡа етди иғтибар биргән. Ә инде арпа тапатыу, йыуаса, кейәү ҡоймағы йолалары игенселеккә бәйле булыуы менән ҡыҙыҡлы. Мәҫәлән, Үҫәргән ырыуы башҡорттарында килендең аяҡ аҫтына — бойҙай, тирә-яҡҡа бауырһаҡ һибеү йолалары бар. Көнсығыш Башҡортостандың ҡайһы бер төбәктәрендә киленгә икмәккә май яғып ашатыу ғәҙәте лә йәшәп килә.

Быуаттар төпкөлөндә яралып, беҙҙең көндәргәсә тарихи осорҙарҙың һыҙаттарын һаҡлап килгән туй йолалары — үткәнде өйрәнеү сығанаҡтары. Традицион туй йолаларында төрлө быуаттарҙың яңғырашы һаҡланып ҡалған. Н.А.Кисляков — тажиктарҙың, С.М.Абрамзон ҡырғыҙҙарҙың йолаларын матриархаттың тарҡалыу һәм патриархатҡа күсеү осорона бәйләп өйрәнә. К.Мәргән башҡорттарҙа ҡушылыу алдынан үткәрелә торған билғау сисеү йолаһын иғтибарға ала. ”Егет билғауын мөмкин тиклем сырмалсыҡ, ҡатмарлы, төйөнлө итеп быуырға, уның осон тапмаҫлыҡ итеп йәшерергә тейеш, ә ҡыҙ шуны сисеү әмәлен (мөмкин тиклем тиҙерәк) табырға тейеш. Был осраҡта ғаиләнең патриархаль нигеҙҙә барлыҡҡа килеүенә, йәки ир затының өҫтөнлөк итәсәгенә ишара яһалғанын күреп була”, — ти ул.

Һырға туйында ике ырыу батырҙарының көрәшендә лә ошо мотив ята. Ҡоҙа һуйған малдың һебә һәм муйын һөйәге өсөн ике яҡтың батыры көрәшә. Көрәш майҙанында ҡыҙ яғының батыры өҫтөн сыҡһа, уға һебә һөйәге бирелгән. Был осраҡта ҡыҙ бей исеменә лайыҡ була, йәғни ире башҡаса ҡатын йәрәшә алмай. Әгәр егет яғының батыры еңә ҡалһа, ҡыҙ байбисә иҫәпләнә, ә ире уның өҫтөнән ҡатын алырға хоҡуҡ яулай. Һырға туйына бәйле ижадта был күренеш тулы асыла:

Һебә биреп, кәләшен
Бейбисә иткән үкенмәҫ.
Һылыу һайлап, илдә йөрөп,
Инде ҡабат елкенмәҫ.
Ҡатын йортҡа бей булһа,
Айыры тояҡ мал уңыр.

Ҡатын байбисә булһа,
Ире илдә ел ҡыуыр.
Ҡатыны бей булғандың
Бар донъяһы йүн булыр.
Шаулы-даулы ҡауғанан
Өй эсе лә тын булыр.

Ҡыҙ йәшереү, сеңләү, бит асыу йолаларында боронғо магия менән бәйле ритуаль йолаларҙың эҙе һаҡланған. Магик инаныуҙарҙың ҡалдығы сеңләү репертуарында ла асыҡ күренә:

Алғышҡайымдан алдырма,
Ҡотоҡайымдан ҡалдырма.
Хаҡ Тәғәлә ҡушҡан алға килер,
Ырыҫ-бәхетемдән яҙҙырма.

К.Мәргән билдәләүенсә, ”уның функцияһы ла тәүге заманда икенсерәк булғандыр, йәғни үҙе ҡалдырып киткән илдең ”хужалары” менән хушлашыу, йорт-ҡура эйәһе, ер-һыу эйәһе кеүек боронғо аң кимәле тыуҙырған күренештәр менән бәхилләшеү, ҡайһы бер осраҡта онотмауҙы (ситкә ташламауҙы) һорап ырыу тотемына мөрәжәғәт итеү функцияһын үтәгәндер”.

Ысынлап та, күп йолаларҙа ҡара ышаныуҙарҙың, табыныуҙарҙың, инаныуҙарҙың саҡҡыһы ялтлап ҡала. Мәҫәлән, Арғаяш яғындағы башҡорттар араһында таралған ”ҡот апҡалыу, ҡот сабыу” йолаһы иғтибарға лайыҡ. Был йола буйынса ҡыҙ күскәндә (оҙатҡанда) бөтә ауыл ат менән ”ҡоҙағый, ҡот бир, ҡоҙағый, ҡот бир” тип туйҙы оҙата бара.

Әй буйы һәм шул уҡ Арғаяш башҡорттарында игәт малына суҡ бәйләү — мал данлау күренеше бар. Һуңынан, суҡтарҙы сисеп, балаларға тараталар. Шулай уҡ һыуға әйбер ташлау, ҡыҙҙың һағынғанда тауға, һыуға мөрәжәғәт итеүендә боронғо ышаныуҙарҙың остоғон күреп була.

Әлбиттә, әле ҡарап үтелгән йолалар һуңыраҡ икенсе йүнәлештә үҫеш алған. Уларҙы башҡарыу функцияһы үҙгәргән. Тәүге функцияһынан айырылып, күптәре уйынға күсеп, шаярыу, көлөү, мәрәкә өсөн генә үтәлә башлаған.

Йолалар үҙҙәре яралған мәлдә кешеләрҙең эшмәкәрлеген, хеҙмәт процесын, нимә менән шөғөлләнеүен сағылдырһа, һуңыраҡ осорҙа халыҡтың мәҙәни кимәленә әйләнеп киткән. Улар тарихи осорҙарҙың, социаль төркөмдәрҙең, географик урындарҙың тәьҫире һөҙөмтәһендә ҙур үҙгәрештәргә дусар ителгән.

Боронғо башҡорт туйының ҡатмарлылығы, күп быуынлылығы һәм ваҡыт буйынса оҙайлы тамашаға әйләнеүе ҡатнашыусыларҙың күп булыуы менән дә бәйләнгән.

Ғаилә ҡороу — ырыу-ҡәбилә өсөн әһәмиәтле ваҡиға. Сөнки ул бала тыуыу, нәҫел ҡалдырыу, ырыуҙы ишәйтеү кеүек мөһим мәсьәләләрҙе күҙ уңында тота. Шуға күрә туй дөйөм байрамға әүерелә, ә уға бәйле поэзия коллектив ижад төҫөн ала. Халыҡтың донъяға ҡарашы, бай тормош тәжрибәһе, әхлаҡи нормалары теләк, йыр, һамаҡ, таҡмаҡ, бейеү, әйтем кеүек ижад төрҙәрендә асыҡ сағыла. Туй ритуалына бәйле ҡайһы бер йолаларҙың маҡсаты яңы ғаиләгә байлыҡ-муллыҡ, шатлыҡ, бәхет, оҙон ғүмер, күп бала теләүҙән, икенселәре өйләнешеүселәрҙе зарарлы көстәр тәьҫиренән аралап ҡалыуҙан тора. Йыр, ҡурай, уйын, төрлө

йолалар — йәштәрҙе данлау, ҡушылыуҙы хуплау, туйға тантаналыҡ биреү сараһы ла. Йола поэзияһы дөйөм тематикалы бер бөтөн художестволыҡты тәшкил итә. Сәсәндәр, йыраусылар тыуҙырған аҫыл һүҙ, көйҙәр художество-эстетик әһәмиәте ифрат та ҙур булған ижадҡа әйләнә.

Туйҙа бер-береһенә ҡаршы ике яҡ, ике ырыу, ике ғаилә ҡатнаша. Уларҙың үҙ-ара мөнәсәбәте туйҙың эстәлеген билдәләй. Боронғо башҡорттарҙа йола буйынса ҡыҙ фәҡәт икенсе ырыу кешеһенә бирелгән. Ғалимдар ҡатынды сит ырыуҙан алыу йолаһын тәүтормош-община ҡоролошонда уҡ тыуған тип иҫбат итә. Ҡатынды сит ырыуҙан алыу XX быуат баштарына тиклем һаҡланып килгән. ”XIX быуатта башҡорттар ҡатынды үҙ ырыуынан, волосынан ала алмаған. Ҡатынды йөҙ саҡырым һәм унан да алыҫ ерҙән алғандар. Был йола XX быуат башында Урал буйы, Урал аръяғы башҡорттарында үҙ көсөндә булған. Ошо уҡ ваҡытта башҡорттарҙың бер төркөмө (көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттарынан башҡа) ҡатынды үҙ ырыуынан, ләкин икенсе ауылдарҙан ала, ә инде үҙ ауылынан икән, һис шикһеҙ, икенсе аймаҡтан, аранан ала. Нисек кенә булмаһын, никахлашыу беренсе дүрт быуын туғандар араһында рөхсәт ителмәй. Тик тыуа ят һәм ете ят — инде сит һаналған туғандар ғына никахҡа инә алған” (С.И.Руденко. ”Башкиры”. М-Л., 1955, 260-сы бит). Күренеүенсә, сит ырыуҙан ҡатын алыу йәки сит ырыу кешеһенә кейәүгә сығыуҙың сәләмәт нәҫел булдырыуҙа мөһимлеген халыҡ үҙ тәжрибәһендә күп һынаған.

Икенсе төркөм ғалимдар, мәҫәлән, Ю.И.Семенов, ят ырыуға ҡыҙ биреү — туғанлыҡ мөнәсәбәттәрен урынлаштырыу өсөн дә мөһим, тип фараз итә (”Как возникло человечество”, М., 1966). Күп осраҡта ҡыҙ алыу, ҡыҙ биреү ырыуҙарҙың берләшеүенә, бер халыҡ булып ойошоуына булышлыҡ иткән.

Туй-йола поэзияһын өйрәнеү ҡыҙҙың сит ырыуға бирелеүенең тағы ла бер сәбәбен асыҡларға мөмкинлек бирә. Ҡан ҡәрҙәшлеге булмаған кешеләрҙең өйләнешеүе ғаилә ныҡлығын булдырырға ярҙам итә. Йыраҡ ергә бирелгән ҡыҙ тиҙ генә ҡайтып китә алмай, нисек булһа ла йәшәп китергә тейеш була.

Башҡорт туйы бик күп күренештәрҙән, йолаларҙан тора: бишек туйы, һырға туйы, ҡыҙ күҙләү, яусылау, мәһәр килтереү, таҫтамал ҡотлау, егет һәм ҡыҙ йорттарында кәңәштуй, мал алыу, ҡоҙа килеү, туй ҡаршылау, ҡыҙ йәшереү, йыртыш йыртыу, ҡыҙ ҡушыу, мунса кереү, көрәгә асыу, йыуаса, туй һуйыу, ҡот алыу, һаба йыйыу, сыбыртҡы ашы, ҡыҙ оҙатыу, сеңләү, килен төшөрөү, һыу башлау, арбау, теләк әйтеү... Бәғзе туй йолаларын, уларға бәйле ижадты күҙҙән үткәрәйек һәм асылдарын төшөнөргә тырышайыҡ.

**Ҡыҙ яусылау.** Никах туйының башланғысы — ҡыҙҙы егеткә димләү, яусы ебәреү. Элек яусы ролен башҡарыусы айырым кешеләр — хөрмәткә лайыҡ, һүҙгә йомарт оләсәйҙәр, олатайҙар булған.

Яусы туйҙа ике ғаиләне һәм улар аша ике ырыуҙы туғанлаштырыусы, дуҫлаштырыусы кеше булараҡ сығыш яһай. Димләү, яусылау үҙе тотош ғөрөф-ғәҙәттәр йыйылмаһынан ғибәрәт. Ҡыҙҙың ата-инәһен күндереү өсөн яусылау тәртибен, нисек итеп һүҙ башлауҙы белеү мөһим булған.

Хәл-әхүәл һорашҡандан һуң, маҡсатты белдереү өсөн, һүҙҙе шиғри һүҙ менән башлағандар:

Миндә ҡайыш баулы ҡарсыға бар,
Һиндә ефәк баулы тутыйғош бар,
Шуны һорай килгәнмен,
Сонайҙан ат алғанмын,
Бохарҙан эйәр алғанмын,
Боролоп һиңә ингәнмен,
Һин тимер булһаң — мин күмер,
Иретергә килгәнмен.

Ата-инә ҡоҙалашырға риза булмаһа, мәһәрҙе гел туғыҙ һанынан һала, ыңғай осраҡта тәкдимгә ризалыҡ билдәһе итеп кешмир яулыҡ йә таҫтамал бирә. Һуңынан яусы аша мәһәр, ҡалым малы хаҡында ике яҡтың һөйләшеүе башлана, туй үткәреү тәртибе билдәләнә. Бында туй үткәреү ваҡыты, кейәү яғынан нисә дуға кеше саҡырылыу, нисә кис ҡунаҡ булыу хаҡында килешелә. Әй буйы башҡорттарында кейәү ҡыҙ яғының сығымдарына аҡса индерә, бал, ит, май, сәй килтерә. Был мәһәр тип атала. Бында тағы ла башҡа әйберҙәр булырға мөмкин: мал, ҡошҡорт, эсемлек, ситса тауар, тун, күлдәк-ыштан, ойоҡ, ситек, ҡалын шәл, быйма, бейәләй, көйәнтә, күнәк...

**Мал алыу туйы.** Һөйләшеүҙән һуң, ҡалым әҙер булһа, мал алыу туйы уҙғарыла. Мал алыуға ҡыҙҙың атаһы үҙенең ағай-энеләре менән бара. Уларҙы өйҙән-өйгә йөрөтөп, бер нисә көн ҡунаҡ итәләр. Ҡунаҡтар егеттең атаһын туй һуйырға саҡырып ҡайта. Мал алыу туйы никах туйынан бәләкәйерәк була. Борон бөтә ауыл, ырыу туй үткәрергә ярҙам иткән. Ырыу үҙенең ағзаһына ҡалым түләргә булыша (төньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда), туйҙы үткәреү сығымдарына өлөш индерә. Ҡыҙ кейәүгә сыҡҡанда уның ырыуы егет яғының туғандарын, ҡунаҡтарын ҡабул итә, ҡыҙҙы оҙатыуҙа ҡатнаша.

**Бирнә.** Һөйләшеүҙән һуң туйға әҙерлек башлана, һәр ике яҡ ҡоҙаҡоҙағый өсөн бүләк әҙерләй. Ҡыҙ ҡәйнә йортона бирнәлек йыя. Бирнә — ҡыҙ яғынан егет яғына бирелгән бүләк. ”Инде бирнә һала инәйем, дүрт ҡат — кейәүгә. Ике запун, аяҡ сылғауы, дүрт ҡат күлмәк, дүрт ҡат ыштан, суптырҙы күлмәк. Фис үҙем эштәгәм, үҙ ҡулым көсө. Нәҫелзаттарына бөтәһенә лә ҡулйаулыҡ. Алар аҡса һала. Әгәр ҙә мәгәр ун ике тәңкә аҡса төштөнейһә, бирнәһе күп булған тейҙәр”. (Н.Максютова. ”Восточный диалект башкирского языка”. М., 1976, 76-сы бит).

Бирнәһеҙ кейәүгә биреү хурлыҡ һаналған. Шуның өсөн етерлек кимәлдә бирнә әҙерләмәй тороп, ҡыҙ йәрәшелмәгән. Бирнә тараҡҡандан һуң ”бирнә ҡотлау” йолаһы башҡарыла. Ошо ваҡытта егет яғы ҡалым малы әҙерләй. Һөйләшелгән мәһәрҙе тулыһынса биреү мотлаҡ һаналған. Шарт буйынса етешмәгән әйберҙәр булһа, ҡыҙҙың туғандары ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарын хурлап төртмәле йырҙар сығарған.

...Ислам дине ҡағиҙәләре урын алғандан һуң, туй, ғаилә ҡороу никах уҡытыу менән нығытыла башлай. Никахты раҫлау өсөн ҡыҙҙың ризалығы талап ителә. Был ваҡытта ҡыҙ икенсе бүлмәгә ябыла. Ҡыҙ ризалығын бирмәгән хәлдә лә муллаға ыңғай яуап ишеттерелгән. Мулла айырым ҡағыҙға өйләнешеүселәрҙең исем-шәрифтәрен һәм ҡалымдың суммаһын теркәй. Ҡунаҡ булышыу туйҙа ҡатнашыусы туған-тыумасаларҙа сиратлап дауам итә. Туй ритуалына ингән ғәҙәттәр бер-бер артлы алмашынып тора: ҡыҙ йәшереү, эҙләү, йыртыш, мунса төшөрөү...

**Ҡыҙ йәшереү. Ҡушыу. Мунса.** Ҡыҙҙы еңгәләр алдан билдәләнгән өйгә йәшерә. Кейәү, егеттәр-ҡыҙҙар уйнап-йырлап, өйҙән-өйгә йөрөп ҡыҙ эҙләй. Еңгәләрҙең береһе (ул ҡыҙ ҡайҙа йәшерелгәнен белә) кейәүгә түбәндәгесә һамаҡлай:

Батыры юҡ аҡ толпар,
Сапһа, бауыр яҙалмаç;
Йола белмәç кейәүҙәр
Ҡыҙын эҙләп табалмаç.

Кейәү бүләк бирһә, ул кейәүҙе аулаҡ өйгә алып бара. Кәләшен эҙләүсене өйгә индермәй, тағы ла бүләк талап итәләр:

Бүләк бирсе, еҙнәкәй,
Урын һалдыҡ аулаҡҡа.
Ҡайта һалып икегеҙ
Сәй эсерһеҙ аулаҡта.

Өйҙә ҡыҙҙар әхирәтте бирмәçкә тырыша. Тартыш башлана.

Беҙгә бүләк биргәс ни,
Ҡыҙ ҡуйынына инерһең, —

тип ҡыҙҙы бирәләр. Ҡуна торған өйҙөң ишек төбөндә йыртыш тотоп торалар. Кейәү уны аяғы менән баçып йыртырға тейеш. Был йола, беренсенән, ҡыҙҙың йәшлеге менән хушлашыуын аңлата. Икенсенән, ҡыҙ хаҡын, өлөш сығарыуға булған ынтылыш өçтөнлөк ала:

Ҡарама кейәү ҡыйбатҡа,
Һин керәһең ожмахҡа,
Ирешерһең моратҡа.
Йыртыш хаҡы бер тәңкә,
Ишек бауы ун тәңкә,
Ҡыҙыбыҙ тора мең тәңкә.

Йырҙар, әйтемдәр ҡыҙ риза булып ҡушылғанда ла, һөймәгән ҡосаҡҡа ингәндә лә башҡарыла. Ҡыҙ менән кейәүҙе сымылдыҡҡа индергәндә лә әйтемләйҙәр:

Бына һиңә, еҙнәкәйем,
Ҡыҙ бирәбеҙ — тотоп ал.
Ата-баба йолаһы тип,
Уң битенән үбеп ал.

К.Мәргән, ҡыҙ йәшереү йолаһы бик боронғо ышаныуҙар ерлегендә тыуған, тип билдәләй. Уның фекеренсә, "был ғәҙәт никахланған йәштәрҙе яуыз көстәрҙән һаҡлау, яуыз көстәрҙе алдатыу, йәштәрҙе уларҙан йәшереү маҡсатында башҡарылған боронғо магик йолаларҙың алыçтағы саҡҡыһы булырға тейеш. Шул яуыз көстәрҙе "алдау" маҡсатында кейәү менән ҡыҙ тәүге кис ҡунаһы урынға икенсе (ғаиләле тормошта күптән йәшәп килгән) парҙы һалыу осраҡтары ла булған".

Кейәү (хәстәрлек өсөн) еңгәләргә йоҡлаған урынға бүләк ҡалдыра. Еңгәләр иртә таңдан мунса әҙерләй, кейәү ҡоймағы бешерә. Ҡыҙ йәштән һөйөш ҡылғанын һиҙһә, мунсанан һуң сәй эскәндә, кейәү бер ҡоймаҡты үтә тишеп, табала ҡалдыра. Элек ҡыҙ сафлығы бик юғары баһаланған. Шуға ла йәштәр йоҡлаған яçтыҡты ҡарау, тикшереү ғәҙәте һаналған. Ҡырҡ көнлөк балаларға бишек туйы, үçә төшкәс, һырға туйы уҙғарыу ҡыҙҙы сит-ят күҙҙән һаҡлау сараһы ла булған. Һырға туйында:

Бына, егет, шәл ябып ҡуй,
Буйын биҙәп торһон,
Йәш-елкенсәк һүҙ ҡушҡанда,
Күңелен ҡаплап торһон,

— тип юҡҡа ғына һамаҡламағандар. Егет, мәңгелек йәр билгеһе итеп, ҡыҙға һырға бирә. Йәрәшелгән ҡыҙ вәғәҙәһен боҙмаҫҡа, ата-инә йөҙөнә ҡара яҡмаҫҡа тейеш булған. Сафлыҡ — һөйөшөп, сәс-сәскә бәйләнеп, тиң ғүмер итеүҙең төп шарты.

**Ҡыҙлыҡ.** Милли йолаларҙа ҡыҙлыҡ намыҫы культы изге һаналған. Ғиффәтһеҙ ҡыҙҙарҙан нәҫелгә оҡшамаған нәҫел тыуғанын халыҡ йәшәйештә күп һынаған. Шуға ла ата-инә, йорт-ил төрлө саралар ҡулланып, ҡыҙ-ҡырҡынды осраҡлы енси мөнәсәбәттәрҙән ныҡ ҡурсалаған. Сафлығын юғалтҡандар — боҙоҡ, кейәүгә сығырға лайыҡһыҙ, тип ҡаралған. Хаҡ булған икән ҡанбабалар. Беҙҙең заман ғалим-генетиктары раҫлауынса, донъяға киләсәк балаларға, уларҙың шәхси сифаттарына ҡыҙ менән булған тәүге ир-егет ғүмерлек йоғонто яһай. Тыуасаҡ балаларҙың генофондын, биологик нигеҙен никахлы ир, законлы атай түгел, ә ҡыҙҙың ҡыҙлығын алыусы һала һәм нәҫелдең ген атаһы булып тора. Йыш ҡына ғаиләлә: ”Был бала кемгә тартҡан, атаһына ла, инәһенә лә оҡшамаған?..” — тип аптырайҙар. Үҙ атаһын яратмаған ҡыҙ йәки ул инәй аша тәүге ирҙең һыҙаттарын һеңдерә һәм ғаилә именлеген боҙа икән.

Бәғзе генетиктарҙың, психологтарҙың фекеренсә, енси мөнәсәбәткә ингән ҡатын-ҡыҙ ир-егеткә оҙаҡ ваҡыт энергетик йәһәттән бәйле ҡала, ә ҡыҙлығын алыусыға ғүмерлеккә ҡеүәһен бирә. Шуға ла ғиффәтле ҡыҙға өйләнеү, уның нескә кимәлдәге дәртләндергес, илһамландырғыс ҡөҙрәтенә эйә булыу фарыҙ. Борон бер нисә ҡатынға өйләнеү ҙә нәҡ шуға бәйле. Ә күп ирҙәр менән сыуалған ҡатын-ҡыҙ көс-ҡөҙрәтен юғалта, зәғиф, ауырыу балалар тыуҙыра.

**Ҡот йәйеү.** Халыҡ ижадында батыр егет менән гүзәл ҡыҙҙың ҡушылыуы, түлләнеүе иғтибарға лайыҡ күренеш. Егет тәүҙә ике-өс башлы дейеү урлап алып килгән, баҡыр йортта көн иткән ҡыҙҙы ҡотҡара, уның менән ирле-ҡатынлы булып бер аҙ торғас, юлын дауам итә. Алты башлы дейеүҙе алышта еңеп, көмөш йорттағы ҡыҙ менән туй яһап, байтаҡ ваҡыт тора. Шунан туғыҙ башлы дейеүҙе юҡ итеп, алтын йорттағы иҫ китерлек һылыуҙы яҡын итә. Һуңынан егет баҡыр, көмөш һарайлы ҡыҙҙарҙы иптәштәренә, йәиһә ағаларына ҡатын итеп бирә, үҙенә алтын һарайлы һылыуҙы ала. Күккә тейеп торған баҡыр, көмөш, алтын йорттар ҡороп ебәрәләр, донъяны шаулатып туй яһайҙар, бергәләп бөтмәҫ байлыҡтарына күмелеп йәшәйҙәр. Әкиәттәрҙә, эпостарҙа батырҙан түл алыу күренеше — көслө нәҫел булдырыу әмәле, сөнки батырҙан батыр тыуа. Был ”Урал батыр” эпосында бик асыҡ сағыла:

Араһында бер ҡарты,
Иң олоһо, өлкәне,
Донъяла күп күргәне:
— Батыр булған ирҙәрҙе
(Һәр йыл ғүмер бер батыр)
Иле өсөн яратыр.
Быуын-быуын үтәр ул,
Киләсәк быуын етәр ул,

Һинең даның ҡалһа ла,
Ҡулда ғәйрәт бөтәр ул.
Ир бөтһә лә, ил бөтмәҫ,
Ил батыры — батырҙан,
Батыр ирҙән тыуар ул;
Атанан күреп, уҡ юнып,
Атанан күреп, яу асып,
Ил эсендә үҫәр ул,
Батырҙан батыр тыуғанда,
Атаһындай булғанда,
Бер быуын тип һанаған
Илдә ғүмер итәр ул.
Ундай батыр аҙ булыр,
Булһа ла, яңғыҙ һин булыр.
Был батырҙан ҡот йәйгән,
Батыр ҡыҙҙан һөт имгән, —
Һиңә тиңдәш булыр ул,
Батырға инә булыр ул, —
Тигәс, Урал тыңлаған:
Гөлөстанды алған, ти,
Бер ҙу-ур туй ҡылған, ти.

Урал батырҙың Ҡатил батша ҡыҙынан — Яйыҡ, Гөлөстандан — Нөгөш, Һомайҙан — Иҙел атлы өс улы тыуа, уға тоғро юлдаш, яуҙа таһыллы ҡулдаш булып, яуыз йәндәрҙе еңә.

Башҡорт халыҡ эпостарында бик тә серле һәм ғилләле күренеш күҙәтелә: батыр егет һыу ҡыҙын ҡулынан түгел, сәсенән тотоп ала. ”Аҡбуҙат” эпосында Сура батырҙан ҡот алып, батыр тыуған заты бар Һәүбән алтын тәхет өҫтөндә алтын сәстәрен тарап ултырған ҡыҙҙың (Нәркәстең) һиҙҙермәй генә сәсен урап тота. Шул ыңғайға ҡыҙ һиҫкәнеп китә. Һәүбән ҡыҙҙың сәсен ебәрмәй. ”Заятүләк менән Һыуһылыу” эпосында Сәмәр хандың Заятүләк атлы батыр улы Асылыкүлдең ситендә яҫы таш өҫтөндә толомдарын тағатып, алтын тараҡ менән алтмыш ҡолас оҙонлоғо ҡара сәсен тарап ултырған һыу ҡыҙын күреп, уның һылыулығына таң ҡалып, иҫе китеп ҡарап тора. Әкренләп-әкренләп кенә яҡынлай ҙа аңғармаҫтан уның ебәк кеүек йомшаҡ сәсенән тотоп ала. Һыу ҡыҙы нисек кенә ысҡынып китергә тырышһа ла, егет ебәрмәй. Егет ҡулының ныҡлығын, унан ҡотола алмаҫын һиҙеп, ҡыҙ ялбарырға тотона. Ни тиклем генә ялынмаһын, Заятүләк һыу ҡыҙын ебәрмәй. Ғашиҡ булып: ”Икәү бергә булайыҡ, бергә тормош ҡорайыҡ”, — ти.

Билдәле фольклорсылар Кирәй Мәргән, Әхмәт Сөләймәнов батыр егет ҡыҙҙың сәсен тотоп, көс-ҡөҙрәтен ала тип фараз итә. Бәпестәрҙең инәләренең сәсен услап серем итеүен күҙәткән бар. Улар инә һөтөн имеп тә, бәлки, инә сәсен тотоп та ҡеүәтләнәләрҙер.

**Йыуаса.** Туйҙың икенсе көнөндә йыуасалап сәй эсеү йолаһы бар. Йыуаса — сөсө ҡамырҙан майҙа ҡайнатылып бешерелгән, егет яғы туйға күстәнәс итеп алып барған ашамлыҡ. Ҡоҙа-ҡоҙасалар күстәнәс күтәреп бейегәндә, йыуасанан ауыҙ иттергәндә йыуаса йырҙары башҡарыла. Улар уйын-көлкө, шаярыу мотивтарына ғына ҡоролған кеүек.

Ләкин ҡоҙа-ҡоҙағыйҙың бай-ярлы, һаран-йомарт булыуына ишара ла сағылып ҡала:

Беҙҙең ҡоҙа хәлле икән,
Йыуасаһы баллы икән.
Ышанмаһаң, ашап ҡара,
Бал-шәкәрҙән тәмле икән.

Йәки:

Ҡоҙа килде яҙ ғына,
Килгән юлы һаҙ ғына.
Көнкүреше насар микән,
Йыуасаһы аҙ ғына.

Аръяҡта ла сыйырсыҡ,
Бирьяҡта ла сыйырсыҡ.
Ҡоҙағыйҙың ашағаны
Ҡаты-ҡото ҡыйырсыҡ.

**Сеңләү.** Сеңләү — туй тамашаһының кульминацион нөктәһе. Ул бөтә туй йолаларына тәрән эмоциональ-драматик төҫ бирә. Сеңләү илау-һыҡтау менән оҙатыла бара һәм үҙенә генә хас көйө менән йәшәй. Сеңләүҙәр тәғәйенләнеше, кемгә, нимәгә йүнәлтелеүенә ҡарап та күп төрлө. Уларҙың йөкмәткеһендә ҡыҙҙың тыуған ере, йорто, йәшлеге менән хушлашыуы, малға һатылыуы, үпкә белдереүе һүрәтләнә.

Сеңләүҙәрҙең йөкмәткеһе уларҙың бик боронғо замандарҙа барлыҡҡа килеүе, халыҡ ижадындағы башҡа жанрҙар (эпос) менән ҙур уртаҡлығы тураһында һөйләй. Был уртаҡ мотивтар бигерәк тә кейәүгә бирелгән ҡыҙҙың ата-инәһенә булған мөрәжәғәте формаһында сағыла. Сеңләүҙәрҙең үҙенсәлекле формалары "Алпамыша", "Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу" сюжеттарында һаҡланып ҡалған. Бында сеңләү тигән һүҙ ҙә ҡулланыла. "Алпамыша"ла Барынһылыу егетте өйөнә кейәү итеп алып ҡайта. Бында сеңләүҙе башҡарыу функцияһы ла башҡараҡ — ҡыҙ ағаһынан, инәһенән, атаһынан кейәүгә сығырға ризалыҡ һорай. Тәүҙә атаһына мөрәжәғәт итә:

Торсо, атай, торсо, атай,
Ҡыҙыңа йомшаҡ булсы, атай.
Өйөңә кейәү алып килдем,
Тороп ҡулың бирсе, атай,
Улың итеп күрсе, атай?
Арҡа тулы ала бейә,
Туғай тулы туры бейә,
Бирнә итеп бирсе, атай?

Инәһенә:

Торсо, инәй, торсо, инәй,
Күҙ йәшемде күрсе, инәй,
Өйөңә кейәү алып килдем,
Шуға ҡулың бирсе, инәй?
Арҡа тулы ала бейә,
Туғай тулы туры бейә,
Бирнә итеп бирсе, инәй?

Сеңләү мотивтары бигерәк тә түбәндәге юлдарҙа асыҡ күренә:

Атаҡайым, ғәзиз атаҡайым,
Ҡыҙыңдың күҙ йәшен күрһәнә,
Күрһәнә, атаҡайым, күрһәнә,
Алпамыша тигән батырға,
Кейәү итеп ҡулың бирһәнә,
Бирһәнә, атаҡайым, бирһәнә.
Ҡыҙың тиң иткән Алпамышаны
Үҙ улыңдай итеп күрһәнә,
Күрһәнә, атаҡайым, күрһәнә.

Сеңләүҙәрҙең әйтеш (диалог) формаһы һирәк осрай. Үндай форма бер нисә иртәктә генә һаҡланып ҡалған. Ата менән ҡыҙ әйтешенең бер төрөн Әбйәлил районында яҙып алыу бәхетенә ирештем. Уны бында "Зиләйлүк-Күдрәйлүк" тигән исем менән әйтемләйҙәр:

Ҡыҙы:

Менеп кенә сапҡан толпарым,
Аяҡтары тайып, һөрөндө.
Күк толпарға ҡарап уйлай торғас,
Әжәлдәрем яҡын күренде.

Атаһы:

Толпар тайһа, балам, ат табылыр,
Атаң һүҙен ныҡлап тот инде:
Тәңре хаҡы итә ир хаҡын да —
Кейәүемде һаҡлап тот инде.

Ҡыҙы:

Кеше хаҡын белгәс, гонаһ булғас,
Ниңә балаң хаҡын оноттоң?
Илле йәшлек ҡартҡа көсләп биреп,
Ниңә күҙ йәшемде күл иттең?

Атаһы:

Урынлаштырҙым, балам, хур булмаç тип,
Дәүләт эйәһе ҡунған бай ергә.
Тамағың туҡ булыр, өçтөң бөтөн,
Шатланырһың, балам, ғүмергә.

Ҡыҙы:

Атам-инәм, тинем, хөрмәт иттем,
Йәш башыма доға алам тип,
Аяуһыҙлыҡ иттең, малға һаттың,
Зинһар, әйтмә мине, балам, тип.

Атаһы:

Йөрәкһемә, балам, йөрәкһемә,
(Э)рәнйетмә мәгәр ир хаҡын.
Әхирәт рәхәтен күрә алмаç
(Э)рәнйеткән ҡатын ир затын.

Ҡыҙы:

Инде генә, атай, йәшәй алмам,
Һөйә алмам уны тиң итеп.
Әхирәт рәхәтен күрмәһәм дә,
Хурлыҡ күрмәм бәхетем, мал бөтөп.

Ҡыҙҙы оҙатыу мәлендә ҡаршылыҡ мотивтары айырыуса көсәйә. Китергә аттар егелгәс, сеңләү башлана. Ҡыҙҙы оҙатырға ауылдаштары йыйыла. Шаршау аҫтында тороп, еңгәләр ҡыҙ исеменән сеңләй башлай. Махсус әҙерлеге, тәжрибәһе булған сеңләүселәр, ғәҙәттә, ҡоҙағыйға, кейәүгә, уларҙың яҡындарына сеңләй. Ҡайһы берҙә ҡыҙ шаршау аҫтында еңгәләр менән бергә үҙе лә сеңләй. К.Мәргән был мәсьәлә буйынса ошондай фекерҙә тора: ”Сеңләүҙәрҙе характерлай торған поэтик материалда һүҙ һәр ваҡыт беренсе заттан (ҡыҙ исеменән) барғанлыҡтан, ҡайһы бер фольклорсылар араһында сеңләүҙе күсеп китеүсе ҡыҙ башҡара тигән хата фекер урын алған. Сеңләүҙе, ғәҙәттә, махсус әҙерлеге булған оҫталар (еңгәләр) башҡара...”

Ләкин китеүсе ҡыҙҙың сеңләү мәлендә үҙенең дә ҡатнашыуы мөмкин. Ғәҙәттә, туй барғанда, бигерәк тә никах ҡыҙҙың ризалығынан башҡа үткәрелгән осраҡта, китеүсе ҡыҙҙың әүҙемлек күрһәтеүе бик тә ихтимал. Быны ул тап сеңләү мәлендә иҫбатлай ала. Был күренеш Ж.Ғ.Кейекбаевтың ”Туғандар һәм таныштар” романында бик отошло яҡтыртылған. Әлбиттә, романда сеңләүсе ҡыҙ Фатима әҙәби образ, мәгәр унда тормош ысынбарлығы сағыла.

Сеңләүҙе туйҙа ҡатнашыусылар күмәкләп илау-һыҡтау менән тамамлаған. Бында ҡыҙҙы йәлләү, уның ҡайғыһын уртаҡлашыу ауаздары ишетелеп ҡала. Башҡортостандың ҡайһы бер төбәктәрендә ҡыҙҙы күсерер алдынан ағай-энеһенә, хатта бөтә ауылға йөрөтөп сеңләткәндәр. Туғандаш ҡаҙаҡ халҡында ла ҡыҙ китер саҡта ауыл, ырыу менән хушлашыу йолаһы бар. Ҡыҙ янына еңгәләре менән йәш килендәр йыйылып, уны шаршау аҫтына алып, яҡындары менән күрешер өсөн, ауыл араһына алып сығып, өйҙән-өйгә йөрөп сеңләйҙәр. Өйҙән-өйгә йөрөп сеңләү башҡорттарҙа бик боронғо йола булырға тейеш. Бер яҡтан, ҡыҙ үҙ яҡындарынан башҡа тыуған ауылы, уның кешеләре менән хушлаша. Икенсенән, бында бөтә ырыуҙаштар туйҙы атҡарышыуҙа ярҙам итә. Туйҙың борон күмәкләп башҡарылыуы хаҡында белешмә был. ”Ҙур шаршауҙы дүрт кеше, дүрт мөйөшөнән тартып, юғары күтәреп, киреп тотоп торалар ҙа, күсер ҡыҙҙы иптәштәре менән бергә шаршау аҫтына алалар. Ошолай итеп, шаршау аҫтында өйҙән-өйгә йөрөп сеңләп, ҡыҙҙы илатып, күрештереп йөрөйҙәр. Һәр бер өйҙә, өйҙәгеләргә тәьҫир итерҙәй һүҙҙәрҙе әйтеп сеңләйҙәр. Бер өйҙә әйтелгән һүҙҙәрҙе мөмкин тиклем, икенсе өйгә ингәс, әйтмәҫкә, сеңләүҙә оҫталыҡ күрһәтергә тырышалар. Өйөнә күсер ҡыҙ инеп сеңләгәндән һәр бер өй хужаһы күсер ҡыҙға табаҡ-һауыт кеүек нәмәләрҙән бүләк биреп сығарырға тейеш була” (Ғ.Ҡорбанғәли. Башҡорт халҡында ҡыҙ биреү рәүеше. ”Башҡорт аймағы”, №4, 1927, 19—20-се биттәр).

Ҡайһы бер төбәктәрҙә ҡыҙ тағы ла ер-һыу менән бәхилләшә, уның эйәһенә онотмау өсөн билдә: суҡ, еп, ҡаҡы (үҫемлек) ҡалдыра. Был йолала ла боронғо аң кимәле тыуҙырған ышаныу-табыныуҙың бер шаңдауын күреп була. Күсер ҡыҙ илап-илап, табына-табына бүләген берәй ағасҡа элеп йәки бәйләп ҡайта.

Сеңләүҙән үрнәк:

Аршын да аршын аҡ уҡа —
Аҡбуҙ атҡайыма дилбегә.

Илап та илап суҡ бәйләйем —
Тыуған илкәйемә билгегә.

Күп урындарҙа ҡыҙҙы оҙатыу алдынан уға инәһе, еңгәләре өгөт-нәсихәт әйтә. Был һамаҡ оҙатыуға бәйле тыуған, уны ҡәйнә йортона төшкәс әйтелгән ”бит асыу” һамағынан айырып ҡарарға кәрәк. Бындай һамаҡтарҙа йәш киленгә әҙәпле, тыйнаҡ булырға саҡырыу, өгөтләү мотивтарын асыҡ күрәбеҙ:

Кейәү йортона барғас,
Албырғанма, ҡыҙыҡай,
Ҡыҙҙар ҡаршы алғанда,
Ырғып төшмә, ҡыҙыҡай.
Ҡәйнәңдән бүләк алмай,
Ишек асма, ҡыҙыҡай.
Әгәр бүләк бирһәләр,
Йөҙөңә һөрт, ҡыҙыҡай.
Өлкәндәрҙе күрерһең —
Сүгәләп ҙурла, ҡыҙыҡай.
Әҙәпле тип һөйләрҙәр,
Һине күргәс, ҡыҙыҡай.

Н.Х.Мәксүтова яҙмаларынан күренеүенсә, ҡыҙ оҙатыу алдынан Мәсетле районында ”тахы таҡыйа уйнаталар, өйөрсөк кеүек өйөртөп, килендең биленә ҡәйнә бер фырансус йаулыҡ бәйҙәй. Аны төбәккә алып сығалар, өйөрмәç уйнарға, йә арпа тапатырға сығыу тейҙәр. Аны тапашып бөткәс, ҡәйнәһе сисеп биленән ҡыҙҙың башына бәйҙәбейә”. Ошо йоланы башҡарыу — ҡыҙҙың ҡәйнә ҡулына күсеүенә, уға буйһонорға тейешлегенә ишара.

Китер ваҡыт еткәс, ҡыҙҙы кейәү килтергән кейемгә кейендерәләр, башына ҡашмау һалалар, түшенә селтәр ҡуялар. Әхирәттәр, еңгәләр йырлай, ҡыҙ илай.

Ҙур тәҙрә төбөндә
Баллы кәнфит ята бер киçәк;
Ҡыҙ балаҡай, ҡыҙ балаҡай,
Ҡыҙ балаҡай ғүмере — аҡ сәсәк.
Анау ҙа тауҙың башында
Ҡурай ғына уйнай ел менән;
Илама ла, әхирәт, илама,
Бер һин генә түгел, ил менән.

Ҡыҙын оҙатҡанда инәһе теләген әйтә:

Селтәрең-тояҡтарың, балаҡай,
Ҡойоп, ергә түшәмә.
Төçөң боҙоп, теш ыржайтып, балаҡай,
Йәмәғәтеңде үртәмә.
Һағынғанда тау саҡыр, балаҡай,
Һарғайғанда һыу саҡыр, балаҡай.

Бында ла тау һәм һыу культына, төрлө тотемдарға мөрәжәғәт итеү саҡтыһын күрергә мөмкин.

Туйҙың һуңғы көнөндә ”сыбыртҡы ите” бешерәләр. Һыйҙан һуң бер кеше ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарының арҡаларына әкрен генә сыбыртҡы менән

һуға. Арҡа буйына һуғылған ҡунаҡ аҡса һала. Ҡыҙ хаҡын сығарыу "сыбыртҡы ите"ндә лә ярылып ята.

Өйҙән сыҡҡанда ҡоҙағый хәйер тарата. Ағаһы ҡыҙҙы ҡырандасҡа ултыртыр алдынан бер күтәрә, бер ергә баҫтыра. Доғаларға һөлгөләр, йыртыштар бәйләнә. Кейәү йыуаш булһа, ҡыҙ ҡырандасын алдан сығарып ебәрәләр. Былай иткәндә: "Ҡатын тормош эшендә иренән алда булыр, ә ире ҡатын һүҙенән сыҡмай, уның ауыҙына ҡарап торор", — тип ырымлайҙар.

Аттар йорттан сыҡҡанда, бала-сағаға кейәү бер ус аҡса, тағы ла кәнфит һибә. Туй аттарын һыбайлылар ҡыуа китә, сабып барып, кейәүҙең бүреген алалар. Аҡса һонғас кире бирәләр.

**Килен төшөрөү.** Килен төшкән урынға халыҡ йыйылып, ҡапҡа асып, уның килеүен көтөп тора. Байрам итәләр, йырлайҙар. Уйнап килгән аттарҙы тотоп, егеттәр доғаларҙы, һөлгөләрҙе сисеп ала. Аттар йортҡа кергәндә, бер нисә тапҡыр мылтыҡтан аталар: йәнәһе, ен-шайтанды индермәйҙәр.

Ҡәйнә йәки морондоҡ инәй икмәк, май алып сығып киленгә ауыҙ иттерә. Бынан һуң морондоҡ инәһе килеп: "Килен таянып төшөргә мал һорай", — тип әйтә. Бер баш мал килтерәләр, килен шуға таянып төшә. Киленде ҡултыҡлап өйгә алып инәләр. Мал культы Силәбе өлкәһе Ҡоншаҡ башҡорттарының туй йолаһында ла һаҡланып ҡала. "Аттан төшмәҫ борон айағына йаһтыҡ бырғыйҙар, бер башмаҡ тәрәйҙәр. Ниғмәттәр былтыр ғына шолай төшөрҙөләр: ҡыһ йаһтыҡҡа баһа, танаға тайана". Ошо туй йолаһы 1962 йылда Н.Х.Мәҡсүтова тарафынан яҙып алынған. Малға таянып төшөү йолаһы һуңғы йылдарға тиклем һаҡланып килә. Килендең әйберҙәрен алып керәләр. Уның ҡустыһы һандыҡ өҫтөнән төшмәйенсә ултыра. Һарыҡ әйтмәйенсә йә аҡса һонмайынса төшмәй. Килен, өйгә ингәс, түргә ҡарап өс ҡайтара сәләм ҡыла, ике ҡулы менән һул теҙенә таянып, уң аяғын артҡа һуҙып, тубығын иҙәнгә тейҙерә. Икенсе бер яҡта өс тапҡыр сүгәләп ҡәйнәһенә баш эйә — ҡәйнәгә буйһоноу ошолай белдерелә. Килен урынға ултырмай торһа, уға тағы ла мал инселәйҙәр. Таянсыҡ малы, инсе малына һауын йәки тана һыйыр, ҡолонло бейә, кәзә йәки һарыҡ биргәндәр. Киленде түргә, мендәр өҫтөнә ултырталар. Ул һикегә түшелдерек һалып тора.

**Һыу башлау.** Ҡыҙҙар, еңгәләр киленде һыу күрергә (башларға) алып китәләр. Йорттан сыҡҡанда, кергәндә мылтыҡтан атыуҙар ҡабатлана. Мылтыҡ атыу киленде зарарлы көстәрҙән һаҡлау, эйәреп килгән ен-шайтандарҙы ҡыуыу өсөн эшләнә. Ҡәйнә йортона төшкәс, әйтелгән теләктәрҙең ҡайһы бер вариантында ошо боронғо ышаныуҙарҙың остоғо һаҡланған:

Ҡабағанан ҡаптырма,
Төйләгәндән типтермә,
Ен-шайтанды индермә,
Иблисте еткермә.
Ҡарға ҡарҡылдамаһын,
Һайыҫҡан шыҡырҙамаһын,
Йот килмәһен, ҡот килһен,
Ырыу эсе туҡ булһын.

Һыу юлы йолаһының төп маҡсаты әле генә төшкән киленде ил, ерһыу менән таныштырыуҙан тора:

Һыуҡайҙарға барып, һыуҙар алып,
Һалҡын һыуҙар тултырып бирәйек.
Килен генә булып үтер юлдың
Һуҡмаҡтарын башлап бирәйек.
Иң башыңа һалып көйәнтәңде,
Һуҡмаҡтарҙан башлап китерһең.
Һыуығыҙ татлы, илегеҙ матур,
Тағатты бит ҡайғым, тиерһең.

Килен шишмәлә битен йыуа. Ауыҙына балдаҡ йә тәңкә ҡабып һыуға төшөрә. Ҡыҙҙар уны һыу төбөнә бутап юғалта. Был — боронғо һыу культына бәйле йола. Балдаҡ, тәңкә ташлау — һыу эйәһенә бер бүләк, уны ризалаштырыу өсөн үтәлгән ғәҙәт. Сөнки тәңкә һыуға төшкән мәлдә килендең морондоҡ инәһе: "Киленде тотма, тәңкәне тот!" — тип һыу эйәһенә мөрәжәғәт итер булған. Шунан килендең битенә, маңлайына һыу һөрткән.

Һыу юлы төрлө ырым-юрауҙарҙы үҙ эсенә ала. Әгәр килен һыуҙы өйгә индергәндә һыу сәселеп китһә, байлыҡҡа юрайҙар. Ҡоро күнәк күтәрһә, тайып йығылһа, килен бәхетһеҙ һаналып, яман күҙ менән ҡарала. Шуға ла оҙатыу мәлендә ҡыҙ ҡаты иҫкәртелә:

Һыу башлауҙа тәү башлап,
Ҡоро күнәк күтәрмә,
Ҡоро аяҡ килен тип,
Шомланырҙар, ҡыҙыҡай.

Килен алып килгән һыуҙан сәй ҡайнатып, килен сәйе эсерәләр, килен күрһәтәләр, уны һынайҙар һәм баһалайҙар.

**Килен курнисы.** Ҡәйнә, килен курнисы (күренеше) итеп, ҡарсыҡ-ҡорсоҡтарға түшелдерек, ҡыҙҙарға сәсмәү, малайҙарға ығырмау (суҡ), йәғни бүләк тарата. Ауыл кешеләренә килен байлығын күрһәтәләр. Ҡайһы бер урындарҙа ҡыҙ бирнәһенә мал әйтеү килен күрергә килгәндә үк талап ителә:

Килен килде — күрегеҙ,
Күрмәлеген бирегеҙ,
Бирә торған малыңдың
Төҫөн әйтеп инегеҙ.

**Теләк (бит асыу).** Һыуҙан ҡайтҡас, ҡәйнәһе килененә алъяпҡыс быуҙыра. Һамаҡлап, үҙенең теләген, килендең бурыстарын әйтә. Теләкте ҡәйнәгә яҡын икенсе бер ҡатын да башҡарырға мөмкин. Төшкән ҡыҙ йыйылған халыҡ уртаһында өгөт-нәсихәт тыңлай, "ҡолағына алҡа итеп таға". Бит асыу әйтеме — ғаиләнең үҙенә күрә яҙылмаған, ләкин ҡалыплашҡан ҡануны ул. Теләк киленде ғаиләнең ҡағиҙәләренә буйһонорға кәрәклекте, бурыстарын еренә еткереп үтәүҙе талап итә. Өгөт-нәсихәт киленгә хәтһеҙ бурыстар йөкмәтә, ләкин хоҡуҡтары хаҡында белдермәй. Сөнки:

Бөгөн килгән киленсәк —
Ҡәйнә алдында килмешәк.

Йәш килен патриархаль тәртип хөкөм һөргән ғаиләлә хеҙмәтсе ролен үтәргә тейеш. Килендең ҡәйнә ҡулында хеҙмәтсе, ҡол булыуы хаҡын-

да әкиәттәрҙә лә әйтелә. Мәҫәлән, "Ҡәйнә менән бахыр килен" әкиәтендә ҡәйнәһе: "Әйҙә, килен, хуш килдең", — тип, янына килгән дә арбанан бәреп төшөргән, ти. Туҡмай-туҡмай эшкә ҡушҡан, ти", — тигән һүҙҙәрҙе уҡыйбыҙ (Башҡорт халыҡ ижады. Өфө, 1959, 98-се бит).

Бындағы шиғри материал туйға бәйле булыуы менән иғтибарҙы йәлеп итә:

"Яуыз ҡәйнә тағы ырылдап ҡысҡырҙы, ти:
Һәй, килен, килмешәк,
Үлә алмаған бер ишәк.
Бешерә белгәс, йәшерә лә бел ине,
Өй ҡыйығына эл ине".

Халыҡ әкиәтте ыңғай өгөт-нәсихәт менән тамамлай:

"Убырға ишек асмағыҙ,
Киленегеҙҙе ҡаҡмағыҙ,
Киленегеҙ ас йөрөмәһен,
Мин күргәнде күрмәһен".

Теләк-әйтемдәре килендә йомшаҡ телле, егәрле, тыңлаусан, ҡәйнә-ҡайны, ир һүҙенән сыҡмаҫҡа саҡыра:

Атаң-инәң әйткәндә,
Була күрмә иренсәк.
Урынһыҙға һүҙ ҡатып,
Гонаһҡа батма, киленсәк.

Ҡайһы бер ҡәйнәләр килендең һылыулығын, бөтә ере лә килешеп торғанлығын, килтергән байлығын, ҡулының алтын булыуын данлай, киләсәктә бәхетле йәшәүен теләй.

Борон төрки халыҡтарында өйләнешеүселәрҙең күңелен биләү, кейәүҙе, йәш килендe тылсымлы һүҙ менән арбау, буйһондороу йолаһы ла булған. Кейәү йортона төшкән киленгә шундай арбау һүҙе әйтелгән:

Имен генә килдеңме, килен?
Аҡ күңелдән һиңә арбау һалам:
Төклө аяғың менән,
Талмаҫ ҡулың менән,
Таймаҫ табаның менән
Йорт-еребеҙгә кил.
Юрағаның юш булһын,
Ҡурҡҡаның буш булһын,
Яңылышмаҫ юл булһын,
Эшең, көнөң уң булһын,
Ашың, һыуың мул булһын,
Йөҙөң айҙай, һүҙең балдай,
Күңелең майҙай булһын!
Арыҫландай алты батырың,
Еләктәй ете матурың
Яҡты донъяға тыуһын.
Батырҙарың мал тапһын,
Матурҙарың бал(а) тапһын.
Алтындың алтындай игелеген,
Етеңдең ебәктәй изгелеген
Күреп ҡыуанырға яҙһын!

Килен ҡаршы алыу әйтеме — туй-йола поэзияһының үҙенсәлекле жанры. Уны асығыраҡ күҙ алдына килтереү өсөн, өгөт-нәсихәт йыйылмаһының бер вариантын килтерәйек:

Әйҙә, матур киленсәк,
Булма улай оялсаҡ,
Инәңдә һин ҡолонсаҡ,
Ҡәйнәңдә һин уйынсаҡ.
Әйҙә, әйҙә, төш әйҙә,
Аҡ тирмәләр эсенә,
Ала балаҫ түшәйбеҙ
Һинең баҫҡан эҙеңә.
Килен, килен, киленсәк,
Һары бейә ҡолонсаҡ,
Һайыҫҡандай һаҡ бул,
Йомортканан аҡ бул,
Ҡарсығалай өлгөр бул,
Эштәреңдә үрнәк бул,
Ыласындай зирәк бул,
Ирең өсөн терәк бул,
Яман эштән йыраҡ бул;
Килен, килен, киленсәк,
Алып төйөн, төйөнсәк,
Көндәштәрең турында
Һүҙ йөрөтмә, киленсәк;
Итәк-еңең шапылдап,
Ауылсы булма, киленсәк,
Ауыҙ-мороноң сапылдап,
Ошаҡсы булма, киленсәк;
Ҡәйнәң ҡушҡан йомошто
Ташлап ҡасма, киленсәк,
Иреңә ҡаршы һүҙ әйтеп,
Ауыҙың асма, киленсәк;
Көндәш менән талашып,
Сүмес алма, киленсәк,
Һыйыр һауыу ваҡытын
Йоҡлап ҡалма, киленсәк;
Йоҡлап ятҡан байыңды
Тор-торлама, киленсәк,
Телсәнләнеп, ҡысҡырып,
Саусы булма, киленсәк;
Күҙең-башың йымылдап,
Күҙсән булма, киленсәк,
Тоҡ ауыҙы буш тиеп,
Ҡорот урлама, киленсәк;
Олторағың ҡалтырап,
Тегендә-бында йөрөмә,
Ҡабағандан ҡаптырма,
Төйләгәндән типтермә;
Өлкәндәргә ҡайҙа ла

Хөрмәт күрһәт, киленсәк,
Кеселәргә ҡайҙа ла
Үрнәк күрһәт, киленсәк;
Ҡарттар менән ирешмә,
Ҡәйнәң менән талашма,
Апһындарыңа бирешмә,
Бәхетле бул, киленсәк;
Йылҡыларың ҡолонлап,
Яландарҙы тултырһын,
Ырыу-ырыу балаларың
Ауыл-ауыл ултырһын;
Аяҡтары шаҡылдап,
Тояҡтары дөңгөлдәп,
Һыйыр, башмаҡ мөңөрҙәп,
Йортоң баҫһын, киленсәк;
Ҡаҙаның ҡаҫмаҡлы булһын,
Һыйырың башмаҡлы булһын,
Умырғаның май булһын,
Тулғатҡаның бал булһын.

Алъяпҡыс быуғандан һуң, килен аш-һыу әҙерләргә ярҙамлаша. Егеттең туғандарында ҡунаҡлашыу дауам итә. Боронғо туйҙарҙа, ҡыҙ төшкәс, яланға майҙан ҡороп, алып барған малды һуйып, туй яһағандар. Туйҙа көрәш, йүгереш, ат сабыштырыу, ҡот сабыштырыу кеүек уйындар булған. Туй дөйөм байрамға әүерелгән.

Ҡәйнә йортонда хеҙмәтсе вазифаһын үтәгән килен әсе яҙмышынан зарланып йырҙар сығарған:

Эреле лә ваҡлы иләкте
Сығарып та ҡуйҙым келәткә.
Үгәй ҙә түгел, үҙ ҡәйнәм,
Үткәрә лә әйтә үҙәккә.
Сауыл да башы аҡ мамыҡ,
Баҫҡыс та ҡуйып ҡарайым.
Үгәй ҙә түгел, үҙ ҡәйнәм,
Нисек тә итеп ярайым.
Кешмир генә минең яулығым,
Ун дүртлелер уның мисәте.
Ун дүрт кенә йәштә йортҡа төштөм,
Ай-һай ҙа уның хәсрәте!

**Мәжлес йырҙары.** Туй барышында мәжлес йырҙары ярайһы ғына урын алып тора. Мәжлес йыры репертуары төрлө. Унда ҡайғылы йырҙар ҙа, таҡмаҡтар ҙа башҡарырға мөмкин. Мәҫәлән, ”Табын йыры” ниндәйҙер моңһоулыҡ менән оҙон көйгә йырлана:

Әй, дуҫтарым, йыр башлайым,
Күтәреп ебәрегеҙ, шул,
Ауыр һүҙҙәр ишетһәгеҙ,
Үткәреп ебәрегеҙ.

Ә инде ”Әй, икегеҙ, икегеҙ” йырында шатлыҡ мотивтары өҫтөнлөк ала, йәштәргә бәхет, тигеҙ ғүмер теләнелә:

Әй, икегеҙ, икегеҙ,
Икегеҙҙең битегеҙ,
Икегеҙ ҙә пар килгәнһеҙ,
Тигеҙ ғүмер итегеҙ.
Самауырҙы тиҙ ҡайната
Ҡыҙыл миләш күмере,
Кейәү менән йәш килендең
Оҙон булһын ғүмере.

”Башҡорт халыҡ ижады”ның йырҙар китабында ”Мәжлес, уйын-көлкө”, йола фольклорында ”Туй йырҙары” тигән айырым бүлектәр бирелгән.

**Хуш аяғы.** Туй тамамланғанда, һаубуллашҡанда ҡыҙҙы оҙатып килеүселәр хужа тарафынан хуш итеү күрәгәһенә, һыйына йыйыла. Мәжлес йыр, ҡурай, таҡмаҡ, бейеү, уйын-көлкө менән бара. Ҡыҙ артынан арсый булып килгәндәргә бүләк бирелә. Шул саҡ ҡот сабыу йолаһы үткәрелә. Ат менгән йәш егеттәр: ”Ҡот бирегеҙ! Ҡот сабырға килдек!” — тип һөрәнләй. Уларға бер көршәк май һәм күмәс сығарып бирәләр. Көршәкте эләктергән егет күмәс менән майҙы ашай-ашай саба, еләә. Уны ҡыуып етеп, икенсе егет көршәкте алып ҡаса. Майҙы, күмәсте ҡулдан-ҡулға йөрөтөп ашап бөткәс, көршәкте килтереп ташлайҙар йә ҡапҡа бағанаһына бәрәләр. Кейәү йортона төшкән ҡыҙ юрау, һынамыш буйынса ҡот кире ҡайтмаһын тип, арсыйҙарҙы оҙатырға сыҡмай.

Ҡоҙалар, арсыйҙар ҡайтҡандан һуң, егеттең еңгәләре аш-һыу әҙерләп, йәнә ҡор, килен сәйенә ҡунаҡтар йыя. Киленгә изге теләктәр әйтелә, кәңәштәр бирелә. Иренең туғандарына тәүләп ҡунаҡҡа барғанда килен һәр өйгә сигелгән таҫтамал элеп керә, ҡулъяулыҡ, суҡ-ығырмау тарата. Уға иһә бал, май ҡаптыралар, мал-тыуар, ҡош-ҡорт инселәйҙәр, ҡот-ырыҫлы булып, татыу йәшәргә өндәйҙәр, өгөт-нәсихәт әйтәләр. Мал инселәү яңы тормош башлаусыларға ярайһы ғына ярҙам булған.

Туй — ҡыҙ тормошонда иң яҡты көн дә, дөм ҡараңғы төн дә һымаҡ. Беренсе тапҡыр ул иғтибар үҙәгенә алына: уға арнап йырҙар йырлана, бәхет-шатлыҡ теләнелә, бер үк ваҡытта ҡыҙ яҙмышының сит ергә, ир, ҡәйнә мөнәсәбәтенә бәйлелеге күрһәтелә.

Төрлө ышаныуҙар, юрауҙар, ғәҙәттәр туй йолаһының эстәлегенә инеп китә: ҡауышыусыларҙы ен-бәрей, шайтандан һаҡлау; һибәләп ямғыр яуһа, кейәү мыжыҡ була; ҡыҙ китер алдынан буран булһа, туй буш күнәкле ҡатынға осраһа, ҡырандастың тәгәрмәсе төшһә — ғаилә бәхетһеҙ һанала.

Тормош—булмыш—йәшәйеш үҙгәреү һөҙөмтәһендә туй йолалары ҡыҫҡарыуға, күпселеге юғалып ҡалыуға дусар ителгән. Байтаҡ йырҙар туй йыры булыуҙан арына, айырым үҫеш ала. Ҡатын-ҡыҙҙың бәхетһеҙ яҙмышы тураһындағы йырҙар, мөхәббәт йырҙары, таҡмаҡтар туйҙан тыш башҡарыла башлай. Йола поэзияһына ингән репертуарҙың байтағы лирик йырҙарға күсә. Ҡайһы бер сеңләүҙәр, берләшеп, шулай уҡ йырға әйләнә.

Баймаҡ, Әбйәлил, Хәйбулла, Бөрйән районларының ҡайһы бер ауылдарында әле лә электән килгән туй йолалары үтәлә. Ҡыйғы, Мәсетле, Салауат, Балаҡатай яҡтарында ауыл туйҙарында иҫке һәм яңы йолаларҙың сиратлашып килеүен күрергә була. Сеңләү иһә шаярыу формаһында йәшәп килә.

Әлбиттә, хәҙер туйҙың характеры бөтөнләй башҡа. Ҡыҙ ҙа, егет тә яратышып ҡауыша. Көсләп биреү ҙә, һатыу ҙа юҡ. Сеңләү аша үпкә белдереү урынына, ҡыҙҙар ата-инәһенә, туғандарына, ҡан ҡәрҙәштәренә рәхмәт әйтә. Һәр кемдең йөҙөндә шатлыҡ, бәхет нурҙары балҡый. Ғәмәлдә беҙҙең ҡыҙҙарға илау-һыҡтау хас түгел, йәштәрҙең яҙмышы, бәхете, киләсәге үҙ ҡулында: уҡыйҙар, эшләйҙәр, һөйгән йәрҙәренә өйләнәләр-көйләнәләр. Мәгәр туй йолаларының, туйға бәйле халыҡ ижадының фәһемен, өгөт-нәсихәтен дә оноторға ярамай. Уларҙа — быуаттар буйы тупланған аҡыл, һабаҡ, быуындан-быуынға тапшырылған аманат.

Йән, ҡан тартыуы, бер-береңә күңел ятыуы, өйләнеү көйләгө, ғаилә татыулығы һәм ныҡлығы ниҙә? Халыҡ ижады өлгөләрендә был сетерекле һорауға ла ғилләле яуап бар. ”Уғыҙ хикәйәте”ндә йәрәшеләсәк ҡыҙ егеткә әйтә:

— Мөхәббәт — ғүмерлек, Алла — мәңгелек, тигәндәрен ишеткәнем бар. Ир менән ҡатын — бер бөтөн. Булаһы ирем ниндәй иманда, мин дә шул иманда.

Артабан ҡыҙ шулай һамаҡлаған, ти:

Мин һинең яртың булайым,
Мин һине яратыр булайым,
Ни әйтһәң, тыңлар булайым,
Әйткәнеңде йыҡмаҫ булайым;
Ҡолағыңда алҡаң булайым,
Тамырыңда ал ҡан булайым,
Кәрәк саҡта ҡалҡан булайым,
Ашың бөтһә, талҡан булайым;
Сәстәреңә биҙәк булайым,
Иҙеүеңдә һиҙәп булайым,
Күҙҙәреңә керпек булайым,
Ил эсендә күркең булайым;
Һин юғыңда бер кем булмайым,
Һин булмаһаң, бер көн тормайым,
Һин — ҡояшым, һин — айым,
Ҡара үҙеңдең яйың.

Уғыҙ әйтә: ”...Һинән башҡа алмам бүтәнде, эҙләгәнем һинһең күптәнге”. Шулай итеп, егет менән ҡыҙ уртаҡ тел таба, күңелдәре, имандары менән бер була. Бөтә ил менән шаулатып туй үткәрәләр, ысын күңелдән һөйөшөп, ҡыуанышып донъя көтөп алып китәләр. Ире — ҡолаҡ икән, ҡатыны — уның алҡаһы, ире — күҙ икән, ҡатыны — уның керпеге...